# АТА-БАБАМ БАҠҠАН ЕР

Һыу әйләнеп, юлығын табыр, ир әйләнеп, илен табыр, тигәндәй, сит өлкәләрҙә йәшәгән ҡәрҙәштәребеҙ үҙ асылын табырға тырыша, милләт яҙмышын ҡайғырта, халыҡ хаҡын даулай. Башҡарған эштәрҙе барлар, киләсәккә бурыстар билдәләр өсөн 16 июндә Екатеринбург ҡалаһында Свердловск өлкәһе башҡорттарының II ҡоролтайы булып үтте. Унда Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Н.А.Мәжитов, Башҡортостандың халыҡ мә-



Ҡоролтай президиумы



Ҡоролтай делегаттары һәм ҡунаҡтары

ғарифы министры урынбаҫары М.Б. Юлмөхәмәтов, «Ағиҙел», «Ватандаш» журналдарының баш мөхәррирҙәре С.Ә.Әлибаев, Ф.В.Әхмәҙиев, Свердловск өлкәһе губернаторы хакимиәтенең ижтимағи һәм дини ойошмалар эштәре буйынса департамент директоры урынбаҫары Г.И.Вертегел һәм башҡа иптәштәр ҡатнашты. Ҡоролтай башҡарылған эштәргә йомғаҡ яһаны, артабанғы эшмәкәрлектең йүнәлештәрен билдәләне.

Тарихҡа баҡһаҡ, әүәл Урта Уралда башҡорттарҙың аҫаба ерҙәре булған. Хәҙерге Свердловск өлкәһе биләмәләрендәге Өпәй, Һыҙғы, Оло Ҡошсо, Терһәк олоҫтарына ҡараған Шәкүр, Аҡбаш, Араҡай, Үрмәкәй, Өфө-Шәгәр, Әртә-Шәгәр, Әҙигол, Бәтке, Ғәйнә, Яманйылға, Рахманғол, Усть-Баяҡ, Ҡуян, Үрге Баяҡ, Бәхмәт, Үрге Боғалыш, Урта Боғалыш, Усть-Боғалыш, Һыҙғы, Арыҫлан, Юлдаш ауылдарында башҡорттар төпләнеп донъя көткән.

Свердловск өлкәһе — ата-бабаларыбыҙ һәм башҡа төрки халыҡтар баҡҡан ер. Был хаҡта географик атамалар ҙа асыҡ һөйләй. Йылғалар — Аҡтай, Алабаш, Аят, Балайыр, Яманйылға, Иҫәт, Ҡошай, Шайтан, Ревда (Рәүә), Сарана (Һарына), Тагил (Тауил), Тура, Шүрәле, Юрмыт... Күлдәр — Балтым, Ишбулат, Таватуй (Таутуй), Шарташ... Тауҙар — Качканар (Ҡасҡындар), Уктус... Ауылдар, ҡасабалар, ҡалалар — Азанка (Аҙан), Алапаевск, Алтынай, Арамиль (Әрә-



09-2001.p65 24 28.08.01, 10:46
Black

мәлә), Арти (Арт), Ачит (Ашит), Буланаш (Боланаш), Бутка (Ботҡа), Елань (Ялан), Ирбит (Ирбей), Тугулым...

1989 йылда халыҡ иҫәбен алыу буйынса Свердловск өлкәһендә 41500 башҡорт иҫәпләнә. Өлкә башҡорттары ҡоролтайы рәйесе Ғарифулла Рәхмәт улы Ҡаһарманов үҙенең отчет докладында телгә алыуынса, әле Свердловск өлкәһендә 50 мең самаһы башҡорт йәшәй, шул иҫәптән Екатеринбургта — 16498, Первоуральскиҙа — 3164, Түбәнге Тагилда — 2222, Үрге Пышмала — 1623, Березовскиҙа — 1589, Каменск-Уральскиҙа — 1495, Һыуһыртта — 1428...

Халыҡ һаны буйынса өлкәлә башҡорттар дүртенсе урынды биләй. Мәгәр милли үҫешкә ирек ҡыҫылған йылдарҙа Свердловск башҡорттары милли йөҙөн юғалтыу сигенә етә. Халыҡ булмышын, йолаларын тергеҙеү, тарихи, рухи ҡиммәттәрҙе һаҡлап ҡалыу, милли мәҙәниәтте, мәғарифты үҫтереү, ҡәрҙәштәрҙе туплау өсөн 1997 йылдың сентябрендә «Свердловск өлкәһе башҡорттары ҡоролтайы» төбәк ижтимағи ойошмаһы ойошторола. Тәүге ҡоролтай 1998 йылда үткәрелә һәм уның ҡарарҙары ҡабул ителә. Улар нисек бойомға ашырылған һуң?



Ғ.Р.Ҡаһарманов

Ҡоролтай рәйесе Ғ.Р.Ҡаһарманов отчет докладында әйтеп үтеүенсә, ҡоролтайҙың Башҡарма комитеты һәм советы байтаҡ эш башҡарған. Екатеринбург, Түбәнге Тагил, Үрге Пышма ҡалаларында, Һыуһырт, Нижнесергинск районында урындағы ҡоролтайҙар ойошторолған. Мәгәр башҡа ҡалаларҙа һәм райондарҙа башҡорттарҙың ныҡ урыҫлашыуы һәм татарлашыуы кеүек сәбәптәр һәм ныҡышмалы эш етмәү арҡаһында был маҡсат гәмәлгә ашмаған.

Ҡоролтай алдынан делегаттарҙан төбәктәрҙә көн итеүсе ҡәрҙәштәребеҙҙең нисек йәшәүҙәрен һөйләүҙәрен үтендем.

**Родионов Ривал Октябрист улы, Сысерть (Һыуһырт) ҡалаһы мәҙәниәт идаралығының халыҡ ижады буйынса методисы:**

— Ҡалала йәшәгән башҡорт-татарҙарҙа милли байрамдарға тартылыу бөтөнләй бөтмәгән. Июнь айында һәр йылды һабантуй үткәрәбеҙ. Ләкин милли мәҙәниәтте тергеҙеү йәһәтенән йөҙөп йөрөп эшләрлек белгестәр, балаларҙы туған телдә уҡытыу өсөн мәктәптәр юҡ.

**Ғайсина Эльза Камал ҡыҙы, Түбәнге Тагил ҡалаһы башҡорттары ҡоролтайы рәйесе:**

— Үҙебеҙҙең хәлдән килгәнсә, рухты һүндермәҫкә тырышабыҙ. Мәҙәниәт йортонда «Ялҡын» башҡорт-татар ансамбле эшләй. Уның ялҡыны башҡаларға ла күсһен тибеҙ. «Дуҫтар» исемле клуб «Туған телем — әсәм теле», «Ятраҡан аштар» кеүек тематик кисәләр үткәрә. Балалар, йәштәр менән эшләү йәһәтенән мәсьәләләр күп. Уларҙы туған телендә уҡытыу тураһында һүҙ ҡуҙғатылһа ла урындағы хакимиәт ярҙам итмәй. Финанслamaғас, татар мәктәбе ябылды. Башҡорт мәктәбе лә, башҡортса уҡытырҙай уҡытыусылар ҙа юҡ. Ҡоролтайға офис, юридик адрес ала алмайбыҙ. Мосолмандарҙың дини үҙәгендә, йә мәҙәниәт йортонда йыйылышабыҙ.

**Римма Бәгдиева:**

— Түбәнге Тагилға Һарытау өлкәһенән күсеп килгәнбеҙ. Атай-инәйем туған телдә һөйләшә. Мин русса уҡыным. Башҡортса һөйләшергә теләк бар ҙа бит, тик аралашыу етмәй. Мәктәп асһындар ине.

**Артур Бәҙретдинов:**

— Түбәнге Тагилда сәнғәт училищеһында уҡыйым, йырлайым. Училищела милли музыкаль әҫәрҙәр юҡ. Бында милли мәҙәниәтте тергеҙергә һәм үҫтерергә кәрәк. Мин үҙем Башҡортостанға ҡайтып торам, шуға туған телде беләм.

**Хөсәйенов Мөсәүир Абрар улы, Первоуральск ҡалаһындағы «Мираҫ» татар милли-мәҙәни автономия рәйесе:**



М.А.Хөсәйенов

— Ҡалала йәшәүсе татарҙарҙың һәм башҡорттарҙың милли үҙенсәлектәрен тергеҙеү һәм үҫтереү өсөн маҡсатҡа ярашлы программа төҙөнөк. Унда шундай йүнәлештәр бар: халыҡтың байрамдарын, йо-



09-2001.p65 25 28.08.01, 10:46
Black

лаларын тергеҙеү, халыҡ ижадын йәнләндереү, йәштәрҙе милли көрәшкә йәлеп итеү, туған телдәрҙә уҡытыу, муниципаль милли-мәҙәни үҙәк ойоштороу, милли гәзит-журналдар нәшер итеү. Мәктәптәрҙе мәғариф идаралығы системаһына индереү зарур. Әле беҙҙә йәкшәмбе мәктәптәре, милли көрәш секциялары эшләй. Исем ҡушыу, бирнә, никах йолаларын үтәйбеҙ, «Һабантуй», «Ҡорбан», «Науруҙ» байрамдарын үткәрәбеҙ. Байрамдан-байрамға «Мираҫ» тигән гәзит сығарабыҙ. Һуғыш һәм хеҙмәт ветераны Ғәптеләүәл Дәүләтшиндың «Тормош тәгәр-



*Ҡәрҙәштәр менән бергә*

мәсе» исемле шиғырҙар китабын нәшер иттек.

Екатеринбургта ҡәрҙәштәребеҙ фән эшмәкәрҙәре Ғарифулла Ҡаһарманов, Рауил Мөхәмәтйәров, Зәлиә Боброва, табип Ғәбделйән Ибраһимов, генераль директор Нәфисә Тюменцева, методист Зәйтүнә Шәймөхәмәтова, арт-директор Салауат Фазлетдинов, рәссам-модельер Разия Ураҙаева, ҡоролтай ағзалары Сөфхәт Надыров, Ринат Вәлиуллиндар менән танышып, уй-фекер алыштыҡ. Улар һәммәһе лә милләт яҙмышы өсөн борсола.

Милли сәйәсәттәге хаталар Свердловск өлкәһендә йәшәгән бихисап ҡәрҙәштәребеҙҙең тарихи хәтерен, милли үҙаңын, телен юғалтыуға килтергән. Әлегә Свердловск өлкәһе буйынса ни бары 60 бала ғына йәкшәмбе мәктәптәрендә башҡорт телен өйрәнә. Шул уҡ ваҡытта башҡорттар иң күп тәшкил иткән Бородулинский совхозының Октябрьск ҡасабаһында татар теле IX синыфҡа тиклем уҡытыла. Ә башҡорт телен уҡытырға уҡытыусылар юҡ. Ҡоролтай Башҡарма комитеты башҡорт балаларын Рәми Ғарипов исемендәге республика башҡорт гимназияһына, йәштәрҙе Башҡортостандың юғары уҡыу йорттарына уҡырға әҙерләү һәм ебәреү менән шөғөлләнгән. Ике йылда Өфөгә 27 кеше уҡырға ебәрелгән. Мәктәпте тамамлаған башҡорт йәштәренә Екатеринбург ҡалаһындағы юғары уҡыу йорттарына уҡырға инергә ярҙам иткәндәр. Урал ғилми үҙәгенең Фәндәр академияһында ғалимдар М.Ш.Ғәҙелшин, А.Н.Мырҙаҡаев, Р.Д.Мөхәмәтйәров уңышлы эшләй.

Мәҙәниәт өлкәһендә халыҡтың рухын күтәрерҙәй саралар күрелгән. Екатеринбургтың тарих музейында Урал башҡорттары мәҙәниәтенең күргәҙмәһе ойошторолған. Ике аҙна дауам иткән күргәҙмәне уҡыусылар, студенттар, ҡала халҡы һәм ҡунаҡтар ҡараған һәм халҡыбыҙ мәҙәниәте менән танышҡан. Башҡортостандың сәнғәт оҫталары ҡатнашлығында һабантуйҙар үткәреү ҡәрҙәштәребеҙҙең рухын күтәреп ебәргән. Екатеринбургта һәм Үрге Пышма ҡалаһында үткәрелгән «Науруҙ» байрамы, унда артистарыбыҙ Алһыу Бәхтиеваның, Фәрүәз Урманшиндың, «Күгәрсен» бейеү ансамбленең сығыштары күңелдәргә уйылған. Әйтеүҙәренсә, былтыр ғына халыҡҡа йөҙҙән ашыу концерт күрһәтелгән. Силәбе өлкәһенең Арғаяш халыҡ театры «Ҡыр ҡаҙҙары» спектаклен ҡуйған. Үрге Пышмала милли көрәш буйынса Урал чемпионаты үткәрелгән. Халҡыбыҙҙың арҙаҡлы шәхестәре менән таныштырыу ғорурландыра. Тыныслыҡ һәм дуҫлыҡ йортонда Салауат Юлаевты хәтерләгәндәр, Әхмәтзәки Вәлидиҙең 110 йыллығын билдәләгәндәр. Өлкә милләт-ара китапханаһында уларға бағышланған әҙәбиәт күргәҙмәһе ойошторолған. Ләкин байтаҡ маҡсаттар тормошҡа ашмаған, хәл итәһе мәсьәләләр күп. Региональ белемде үҫтереү институты методисы З.М.Шәймөхәмәтова башҡорт телен



09-2001.p65 26 28.08.01, 10:46
Black



*Яңы һайланған Свердловск өлкәһе башкорттары королтайы Башкарма комитеты рәйесе Н.Ф.Тюменцева*

уҡытыуҙы дәүләт мәғариф стандартына индереү мөһимлеген иғтибар үҙәгенә ҡуйҙы. Свердловск өлкәһендә башҡортса гәзит-журнал сыҡмау, радио һәм телетапшырыуҙар булмау сәбәпле, балалар милли әҙәби телде танып белмәй, ишетмәй, аралашыу мөхите юҡ. Өлкәлә башҡорт телен уҡытыуҙы дәүләт кимәлендә хәл итергә кәрәк.

Урал дәүләт тау-геология академияһы доценты Зәлиә Боброва башҡорт халҡын, телен тергеҙеүҙә әсәнең һәм ғаиләнең роле, ҡоролтай эшмәкәрлегенең төп йүнәлештәре тураһында төплө фекерҙәр, тәҡдимдәр менән сығыш яһаны. Свердловск өлкәһе башҡорттары ҡоролтайының ойоштороу структураһын камиллаштырыу, Екатеринбургта башҡорт милли-мәҙәни үҙәген асыу, халыҡтың мәҙәни-этник йолаларын тергеҙеү, башҡорт телен өйрәнеү өсөн мөмкинлектәр тыуҙырыу, башҡортса гәзит сығарыу, радиотапшырыуҙар алып барыу... Силәбе, Ҡурған, Ырымбур өлкәләре менән сағыштырғанда, Свердловск өлкәһе милли мәҙәниәтте, сәнғәтте тергеҙеү, туған телде һәм әҙәбиәтте өйрәнеү буйынса артта ҡала.

Татарҙарҙың «Мираҫ» милли-мәҙәни автономияһы рәйесе Мөсәүир Хөсәйеновтың әсенеп һөйләүенсә, Свердловск өлкәһе губернаторы, хөкүмәте, өлкә Думаһы милли мәнфәғәттәрҙе һанға һуҡмай, мәҙәни-мәғариф программаларын бойомға ашырыуҙы финансламай. Ул губернаторҙан «Милли-мәҙәни автономия тураһында» федераль закондың үтәлешен талап итергә, Свердловск өлкәһе башҡорттарын тергеҙеү программаһын бойомға ашырыуҙы өлкә бюджетына индереүгә өлгәшергә, һүҙҙән эшкә күсергә саҡырҙы.

Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Нияз Мәжитов Свердловск өлкәһе башҡорттарының урыҫ, татар халыҡтарының йоғонтоһона нығыраҡ дусар булыуын, милли үҙаңдың түбәнлеген, был өлкә ҡоролтайының эшмәкәрлегендә лә сағылыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды. Уның һығымта яһауынса, I ҡоролтай ҡабул иткән резолюцияның байтаҡ мөһим ҡарарҙары үтәлмәгән. Мәктәптәрҙә башҡорт теле уҡытылмай, башҡортса гәзит сығарылмай, радиотапшырыуҙар алып барылмай... Нияз Абдулхаҡ улының фекеренсә, Свердловск өлкәһендә милли сәйәсәт юҡ, милли ихтыяждарҙы ҡәнәғәтләндереүгә финанс ярҙамы күрһәтелмәй. Ә бит өлкәлә йәшәгән башҡорттар етди мөнәсәбәткә мохтаж.

Свердловск өлкәһе башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ла билдәләнгән төп йүнәлештәр буйынса ныҡышмалы эшләмәгән. Ҡоролтай ағзалары береклектә — тереклек, берлектә — бәрәкәт, тарҡаулыҡта — һәләкәт икәнен онотҡан. Үҙ-ара килешеп эшләмәү, вазифа бүлешеү, низағлашыу дәүләт власы органдары менән хеҙмәттәшлек итергә, изге ниәттәрҙе бойомға ашырырға ҡамасаулай, ҡоролтайҙың абруйын төшөрә. Шуға ла ҡоролтайҙа Свердловск өлкәһе башҡорттары өсөн берҙәмлек бик мөһим булыуы билдәләнде. Өлкә ҡоролтайы Башҡарма комитетына берҙәмлекте тәьмин итерҙәй ағзалар тәҡдим ителде, рәйесе итеп «Евразия» ҡунаҡханаһының генераль директоры Нәфисә Фәсхетдин ҡыҙы Тюменцева һайланды. Башҡорт халҡының гимны «Урал» яңғыраған һәм күңелдәргә рух биргән ҡоролтайҙың милләтте тергеҙеү буйынса эште йәнләндереренә ышаныс ҙур. Тик өмөттәр, дәрт-дарман ғына һүрелмәһен.

*Сәлимйән Бәҙретдинов.*



09-2001.p65 27 28.08.01, 10:46
Black